С

# ИСЛАМДА
# ҒИЛЕМ ҺӘМ ҒИБӘҘӘТ



Бер ваҡыт үҙенең сәхәбәләренән һорай пәйғәмбәр, ғәләйһис-сәләм: “Әгәр ҙә һеҙҙең арағыҙҙан берәү өйөнә ҡайтып, ихатаһында эре һөйәкле, көр тәнле һәм быуаҙ өс дөйә күрһә, ул быға һөйөнөр инеме?” - ти. “Әлбиттә, һөйөнөр ине!” - тиҙәр сәхәбәләр. “Намаҙ уҡығанда һеҙ уҡый ала торған өс аят бына ошо дөйәләрҙән яҡшыраҡ, - тигән пәйғәмбәр, ғәләйһиссәләм. - Бына шуның өсөн дә уҡырға өйрәнегеҙ! - ти ул. - Ғилем эстәп йөрөгәндә юлдың оҙонлоғона, халыҡтың төрлө диндә йәки бөтөнләй мәжүси булыуына иғтибар итмәгеҙ, ҡайҙа тапһағыҙ, ғилемде шунан алығыҙ”.

“Ҡытайға барып булһа ла ғилемгә өйрәнегеҙ, сөнки ғилем эстәү ул - һәр мосолманға фарыз”.

Был хәҙистең мәғәнәһен мосолмандар борон-борондан аңлап килгәндәр. Ҡайҙа барып сыҡһалар ҙа, шул төбәктәге халыҡтың хикмәтле фекерҙәре менән ҡыҙыҡһынып, грек, фарсы, Урта Азия халыҡтары әҙәбиәтенән һәм фәлсәфә фәненән әллә күпме хазина алып ҡайтҡандар, тәржемә эшенә ғәйет ҙур иғтибар бирелгән. Дин хөкөмдәре һәм Ҡөрьән аяттары тәьҫирендә донъя әҙәбиәтенең йөҙөк ҡашы булған аҡыл һәм хикмәт эйәләре - Әфләтун, Әбүғәлисина, Бируни, Фирдәү-си, Джәми, Руми, Хафиз, Сәғҙи кеүек хикмәт эйәләре үҫеп сыҡҡан.

Һижри иҫәп менән 93-сө йылда ғәрәптәр үҙҙәре лә ғилем эстәп Ҡытайға тиклем барып еткәндәр.

Икенсе яҡлап Имам Бохари һәм уның шәкерттәре яҙып ҡалдырған хеҙмәттәр көнсығыштан көнбайышҡа тиклем таралған.

“Бер нәмәгә өйрәнеп алған мосолмандың уны башҡаларға өйрәтеүе - саҙаҡа, - тигән пәйғәмбәр, ғәләйһис-сәләм. - Саҙаҡаның да иң яҡшыһы”.

Шуға ла хисап көнөндә имамдың яуабы ауырыраҡ. Уның өҫтөндә кеше хаҡы бар: кешеләргә хеҙмәт итеү, уларҙы өйрәтеп тороу кеүек ауыр йөктө елкәһенә алған ул.

Ғәмәл ул - ғибәҙәт.

“Эй, Раббым! - тигән ул. - Минең өммәтемдән эш башында булған берәү халыҡҡа ауырлыҡ килтерһә, һин дә уға ауырлыҡ килтер: эш башында торған кеше халыҡҡа йомшаҡ булһа һин дә уға йомшаҡ бул!”.

Пәйғәмбәребеҙҙең хәҙистәре - хикмәт һәм тапҡырлыҡ өлгөһө, иманлы бәндәләр өсөн ғилем шишмәһе. Шуның өсөн дә халыҡ күңелендә улар төплө урын алған һәм быуындан быуынға ҡалып килә.

“Хикмәтле һүҙ - мосолмандың юғалтҡан нәмәһе. Ҡайҙа ғына тапһа ла, шунан уны ала ла белһен!”.

Ғалимдарҙың дәрәжәһе Исламда оло. “Ғалимдар, - тигән пәйғәмбәр, ғәләйһис-сәләм, - илде именлектә тотоу өсөн үҙ халҡына Аллаһы Тәғәлә тарафыннан билдәләнеп ҡуйылған кешеләр. Әгәр ҙә кешеләргә уның һүҙе үтһә, милләт тә именлектән мәхрүм ҡалмаҫ, болаға бирелеп бәндәләр бәләгә юлыҡмаҫ”.

Борон-борондан халыҡ үҙҙәренең имамдарын ғалим дәрәжәһенә күтәреп ҡабул иткән.

“Кешеләрҙең хөрмәте, дәрәжәһе - динендә, егетлеге - аҡылында, заты - холҡонда беленә”.

“Бәндәнең, - тигән пәйғәмбәр, ғәләйһис-сәләм, - иманы саф, күңеле сәләмәт, теле тапҡыр һәм тоғро, йәне тыныс, йәғни дине һәм донъяһы өсөн бер ниндәй ҙә борсолоуҙары, шик-шөбһәләре булмаһа, өҫтәүенә холҡо күркәм, ҡолаҡтары ишетеп, күҙҙәре күреп торһа, уның тормошо ла уңышлы буласа", - ти.

Әгәр ҙә беҙ үҙебеҙ ҙә тормошта Аллаһы Сөбхәнә үә Тәғәләнең әмерҙәренә ҡолаҡ һала белһәк, зиһенебеҙ менән уйлап, күңел күҙе менән Аллаһтың барлығын да, ҡөҙрәтен дә күреп, һәр нәмәне аҡыл үлсәүенә һалып үлсәй алһаҡ, һис шикһеҙ отолоуҙа ҡалмабыҙ.

“Әгәр ҙә беҙҙең ғалимдарыбыҙ - Ислам ғалимдары - мәсет мөнбәрҙәренән үҙ телебеҙҙә фәһемле вәғәздәр, хикмәтле фекерҙәргә нигеҙләнгән хөтбәләр һөйләп, дәүерҙәр, илдәр, халыҡтар тормошо, тәрбиә һәм тәрбиәлелек хаҡында мәғлүмәттәр биреп торһалар, шул ваҡытта беҙ ҙә моратыбыҙға өлгәшмәй ҡалмаҫ инек, - тип яҙғандар, пәйғәмбәребеҙ хәҙистәренә биргән шәрехтәрендә, Ғәриф Бик менән Ғәбдрәшит Ибраһимов хәҙрәттәр. - Милләттең бәлешен ашап, саҙаҡаһын алып һәм шуға фатиха ҡылыу менән генә Аллаһ ҡолдары булып булмай. Ғалимдарҙың урыны - мөнбәрҙәрҙә, халыҡ араһында һәр кем аңлай торған матур телдә, халыҡты үҙ телендә нәсихәттәр биреп тороу”.

Хәҙистәр өйрәтә: “Ғалим булыр өсөн Аллаһы Тәғәләнән ҡурҡа белеү, наҙанлыҡ өсөн үҙеңә үҙең иҫең китеп йөрөү ҙә етә”, - ти.

“Ниндәйҙер бер фекерҙе кем әйтеүенә ҡарама, уны нимә хаҡында әйтеүенә ҡара, - тигән Ғәли хәҙрәт. - Төрлө диндәге ғалимдар, аҡыл эйәләре әйтеп ҡалдырған һүҙҙәрҙе лә: “Был кафырҙар һүҙе!” - тип инҡар итә күрмә”.

Хәлифә Ғәбделғәзиз бин Ғүмәр, мәҫәлән, мәжүси ғалимдар яҙған төрлө хеҙмәттәрҙе ғәрәп теленә тәржемә иттереп мосолмандар араһында таратыу сараһын күргән була.

“Мин, - тигән пәйғәмбәр, ғәләйһис-сәләм, - һөйләгәндә һүҙҙе ҡыҫҡа тоторға бойоролдом, сөнки нәсихәттең иң яҡшыһы - һүҙе аҙ, мәғәнәһе күп булғаны”.

Пәйғәмбәребеҙ тағы ла әйткән: “Кешенең малға һәм данға хирыс булыу сәбәпле, килтергән зыяны ҡуй көтөүенә ингән ике ас бүре зарарынан да кәм булмаҫ”, - тигән.

“Белгәндәр алдында маҡтаныу, белмәгәндәрҙе алдап йөрөү йәки халыҡтан үҙенә файҙа табыу, уны үҙенә ҡаратып дан ҡаҙаныу өсөн генә ғилемгә өйрәнгән кешенең урыны - утта”, - тиелә хәҙистәрҙә.

Ҡөрьән өйрәтә: “Уларҙың - монафиҡтарҙың - нәфсе ҡотҡоһона бирелеп, үҙ-ара оҙаҡ-оҙаҡ һөйләшеп йөрөүендә мәғәнә юҡ.

Әгәр ҙә инде берәү килеп, мохтаждарға йәки Аллаһ юлына саҙаҡалар бирергә, яманлыҡтарҙан тыйып, яҡшы эштәр эшләргә бойорһа йәки кешеләр араһын төҙәтергә тырышып һүҙ һөйләһә, ана шул кешеләрҙең һүҙҙәрендә хәйер һәм файҙа бар. Аллаһ ризалығы өсөн тип, игелек эшләгән шул кешегә Беҙ оло әжер-сауаптар һәм йәннәт ниғмәттәре биребеҙ, - ти.

***“Ән-Ниса” (Ҡатындар) сүрәһе, 114-се аят Башҡортостан радиоһының “Иман” тапшырыуынан”.***

# ИЗГЕ КИТАПТАРЫБЫҘ

Ғәлимә **АМАНОВА**

Аллаһы Тәғәлә кешеләр хаҡ юлдан аҙашмаһын, тоғро юлдан барһын, үҙенең тәғәйенләнешен онотмаһын өсөн ер йөҙөнә хаҡ илселәре аша Изге китаптар ебәреп торған. Ә ул пәйғәмбәрҙәрҙең һәр ҡайһыһы ошо китап буйынса халыҡты тоғро юлға өндәгән. Ул китаптарҙа дин үә шәриғәт хөкөмдәре бәйән ителгән. Ҡайһы бер пәйғәмбәрҙәрзең үҙҙәренә айырым китаптар бирелгән, ә икенселәре үҙҙәренән элек килгән пәйғәмбәрҙәргә бирелгән китап буйынса халыҡты тоғро юлға өндәгән.

Аллаһы Тәғәлә тарафынан пәйғәмбәрҙәргә бирелгән китаптарҙан “Тәүрат”, “Забур”, “Инжил”, “Көрьән” исемендәгеләре иң ҙур китаптарҙыр.

Быларҙан “Тәүрат” Муса пәйғәмбәргә, “Забур” Дауыт пәйғәмбәргә, “Инжил” Ғайса пәйғәмбәргә, “Көрьән” Мөхәммәт пәйғәмбәргә бирелгән.

Бынан башҡа Әҙәм, Ибраһим, Шиҫ һәм Иҙрис исемле пәйғәмбәрзәргә лә китаптар бирелгән.

Һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәткә ебәрелгән Көрьән китабы һәр мосолмандың өйөндә булырга тейеш. Беҙ мосолмандар тик ундағы бойороҡтар буйынса ғәмәл итергә тейешбеҙ.

Көрьәндәге һәр һүҙ - ул Аллаһы Тәғәләнең һүзе. Без быны иҫтә тоторга тейешбеҙ.

Көрьән-Кәримдә бөтәһе 114 сүрә бар. Улар аяттарга бүленгән. Көрьән тексы 30 тигез өлөшкә бүленгән, ғәрәпсә улар джүз тип атала. Ҡайһы бер сүрәләр Мөхәммәткә (сас) Мәккә, ә икенселәре Мәзинә ҡалаһында төшөрөлгән.

Көрьәндең беренсе “Әл-Фәтиха” сүрәһе иң билдәлеләрҙән һанала. Был сүрәне мосолмандар 5 ваҡыт намаҙза һәр ваҡыт уҡый. “Баҡара” сүрәһенең “Аят-әл курси“ аяты шулай уҡ иң бөйөк аяттарзан һанала. Был турала Пәйғәмбәребеззең хәҙис-тәре лә байтаҡ. Был аятты һәр кем яттан белергә тейеш. Ә бына “Йа-син” сүрәһе Исламда “Ҡөрьәндең йөрәге” тип һанала.

Башҡа изге китаптар төрлө сәбәптәр арҡаһында ҡайһы бер үзгәртеүҙәргә дусар булһа, Көрьән китабы Киәмәт көнөнә тиклем һис үҙгәрмәйәсәк, сөнки уны Аллаһы Тәғәлә үҙе һаҡлай.

Ҡөрьән китабы - изге китап икәнен онотмайыҡ. Уны аңларға, шундағы күрһәтмәләр буйынса йәшәргә тырышайыҡ.

